**МУНИЦИПАЛЬ АВТОНОМЛЫ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ**
**«СУЛПЫЛАР» БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ**

**ТӘРБИӘСЕЛӘР ӨСӨН КОНСУЛЬТАЦИЯ**

# «ТЕАТР АША БАЛАЛАРҘЫҢ ТЕЛМӘРЕН ҮҪТЕРЕҮ»

**МУЗЫКА ЕТӘКСЕҺЕ:**
**ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА Р.Ә.**

**СИБАЙ - 2016**

1. Балалар баҡсаһында алып барылған башҡа тәбиғи белем биреү эшмәкәрлектәре кеүек үк театр эшмәкәрлегендә баланың кесе йәштән телмәре үҫешендә ҙур роль уйнай.

Маҡсат:

Балаларҙың театр эшмәкәрлегендә шарттар булдырыу аша баланы тормоштоң, кешеләрҙең матурлығын күрә белергә өйрәтеү.

Бурыстары:

- театр тураһындағы дөйөм күҙаллауҙарҙы үҫтереү, уға эмоциональыңғай ҡараш тыуҙырыу
- балаларҙың башҡарыу оҫталығы күнекмәләрен камиллаштырыу һәм телмәр, интонация өҫтөндә эшләү
- балала үҙ-үҙен тәбиғи һәм иркен тотоу һәләтлеген үҫтереү
- балаларҙа тормошҡа эстетик ҡараш булдырыу

2. 1)Театр эшмәкәрлегендә, уйындарҙа баланың актив телмәр запасы арта, өн культураһы үҫешә, аралашыу мәҙәниәте формалаша, камиллаша. Театрлаштырылған уйындарҙа бала телмәренең төрлө яҡтарын активлаштыра һүҙлек запасын, телмәрҙең грамматик төҙөлөшөн, диалогик һәм монологик телмәрҙең, телмәрҙә өндәр мәҙәниәтен үҫтерә.

Шул уҡ ваҡытта, әйтергә кәрәк, балаларҙың үҙ-аллы ойошторолған уйын эшмәкәрлеге бала телмәренең актив үҫешенә булышлыҡ итә, ҡурсаҡ персонаждар менән йәки рольдәрҙе үҙ аллы эш итеп кенә ҡалмай, ә әҙәби-телмәр эшмәкәрлеген дә байыта. Балаларға тема һайлау, таныш йөкмәткене бирә белеү, персонаждар исеменән йырҙар уйлап сығарыу, башҡарыу, уларҙы сәхнәләштереү, бейеү кеүек саралар инә.

Театр көй ярҙамында алып барыла, сөнки бала театр эшмәкәрлегендә бөтә таланттарын аса ала: ул йырлай, һөйләй, бейей һәм дә баланың телмәре үҫешә. Шуның өсөн дә берәй әҫәрҙе өйрәнгәндә тәрбиәсе йә булмаһа музыка етәксеһе баланың эмоция һәм хәрәкәттәренә генә иғтибар итмәй, иң беренсе телмәренә иғтибар бүлә, һүҙҙәрҙең дөрөҫ әйтелешенә иғтибар итә. Ошоноң

менән баланың һүҙлек запасы арта, фекерләү ҡеүәһе үҫешә һәм иң мөһиме баланың бәйләнешле телмәре үҫешә.

Шиғыр өйрәнгәндә инде баланың өндәрҙең дөрөҫ әйтелеше, дикцияһы дөрөҫ формалаша, бала үҙенә ауыр булған һөйләмдәрҙе ҡабатлап әйтә, таныш булмаған һүҙҙәр менән таныша.

Театр эшмәкәрлеген ойоштороуҙа төп роль фон төҙөүгә бирелә.

Театрлаштырыу – төрлө тауыштар сығарыу, көйҙәр, төҫтәр уйлап сығарыу, сөнки ул башҡа төр эшмәкәрлектәр менән тығыҙ бәйләнгән: телмәр үҫтереү, һүрәт төшөрөү, дәрестәрҙең бер өлөшө булып тора. Бик күп уйындар, күнегеүҙәр математика, музыка, ритмика, физкультура дәрестәрендә лә ҡулланыла ала, театр эшмәкәрлек дөйөм педагогик процеста ҡулланыла.

Баланың театрлаштырылған уйындарҙа ҡатнашыуы: шиғырҙарҙы, йырҙарҙы, бәләкәй сәхнә әҫәрҙәрен, экиәттәрҙе, көләмәстәрҙе уйнай белеү, ҡурсаҡтар, уйынсыҡтар һәм би-ба-бо күләгә, фла-телеграф, уйынсыҡтар бармаҡ, өҫтәл театры, һүрәт театры, бирсәткә театры, ҡумта театры, бейәләй театры, бәйләнгән уйынсыҡтар театры, таяҡтағы еп ярҙамында хәрәкәт итеүсе ҡурсаҡтар театры, таяҡсалағы ҡурсаҡ театры, «тере ҡуллы» ҡурсаҡтар.

2) Театр – уйын эшмәкәрлеге өсөн ҡулланалар:

- сәхнәне бүлеү өсөн ширмалар, кәртәләр.
- балалар ҡулы менән эшләнгән ябай декорациялар.

3) Түңәрәк уйындарына ярашлы атрибуттар бар:

- битлектәр, ярымбитлектәр,битлек баштар.
- әкиәт персонаждары битлектәре.
- таҫмалар, яулыҡтар, веноктар, костюм элементтары, костюмдар, ҙур көҙгө.

Балаларҙы телмәрҙең тасуирлыҡ сараларына өйрәтеү ваҡытында диалогтар, репликалар һәм башҡа тасуири сараларға бай булған, таныш һәм балалар яратҡан экиәттәр ҡулланырға тәкдим ителә, сөнки бындай

саралар баланы үҙ халҡының бай йөкмәткеле телмәр мәҙәниәте менән таныштыра.

Әкиәттәрҙе уйнау, балаға телмәр, мимика, ым-ишара, хәрәкәт менән аңлатыу кеүек тасуири сараларҙы киң ҡулланырға өйрәтә. Әкиәт өҙөктәрен күнегеүҙәр итеп алырға мөмкин: берәй йәнлек булып һөйләшеү, дуҫына ҡунаҡҡа барыу, һуңынан күнегеүҙәр ҡатмарлайа бара. Шулай итеп, балалар телмәр аша берәй хайуандың характерын, тауышын, хәрәкәттәрен, тәртибен башҡалар аңларлыҡ итеп уйнарға өйрәнә.

Иллюстрациялар, һүрәттәр аша телмәр үҫтереүсе ролле диалогтар бик ҙур файҙа килтерә. Төрлө тел-төҙәткестәр ҡулланырға тәкдим ителә.

Шуның өсөн дә театрлаштырылған эшмәкәрлек тасуири телмәр үҫешендә - баланың тойғоларын, эмоциональ кисерештәрен, рухи байлыҡтарын һанап бөткөһөҙ.

Баланың ижади һәләтлеген үҫтереүҙә һәм уның үҙ-аллы эшмәкәрлегендә, хис-тойғоларҙы кисерергә өйрәтә. Ошонан сығып мин театр-эшмәкәрлек баланың телмәр үҫешендә ҙур роль уйнай тип әйтә алам.